# МАҒАШ

Рәшит Ниғмати

Таң атты ла
Мағаш буйындағы
Ағас япраҡтарын ҡыҙартты.
Түңкәрелгән янға оҡшап ята
Мағаштауҙың тышҡы һызаты.
Бер әкиәт бар:
имеш, ир салауат
Ошо ерҙән үткән сағында,
Дошманына улем атҡан янын
Һалып торған Мағаш тауына.
Батыр киткән саҡта,
уны озатып,
Шаулашкандар бында ағастар.
Тау өҫтөндә ятҡан янды алғас,.
Ян һүрәте ҡалған Мағашта.
Мин ышанам быға.
ир Салауат
Яуға сапкан бына ошонан,
Мағаштауҙы
тик ян менән түгел,
Йәне менән ҡурсыған.
Гүзәл Мағаш!
Үтер ҡоштар уға
Һис булдыра алмай ҡунмаҫҡа.
Алтын тауҙар алтын булһалар ҙа,
Мағаш кеүек матур булмаҫтар!
Томан күпер кеүек,
Мағаштауҙың
Тап өҫтөнә үтә Ҡош юлы.
Мағаш итәгендә колхоз йашәй,.
Оло семья булып, дуҫ булып.

1955 йыл.